*Спартак ИЛЬЯСОВ*

# ҺӘР МИЛЛӘТ ЙӘШӘРГӘ ХОҠУҠЛЫ

Беҙ — Рәсәй уртаһында йәшәүсе боронғо төркиҙәр — ассимиляция тигән дауыл-гәрәсәттең иң ҙур тулҡындары өҫтөндә тирбәләбеҙ. Эсәбеҙ, тартабыҙ, күптәребеҙ үҙ туған телен белмәй, милләт булараҡ үлеп барғаныбыҙҙы аңламайбыҙ. Бөгөнгө көндә милләттең милләтлеген дәлилләүсе төп сифаттар ойошоп йәшәгән ере, мәҙәниәте генә тип әйтмәҫ инем. Туған телде белеү үтә мөһим. Ҡытайҙа йәки Италияла йәшәп тә туған телеңдә саф һөйләшһәң, телеңде тәрән ихтирам итһәң, һин унда ла башҡортһоң! Үҙ телендә һөйләшә белмәгән инсандың милләтенең вәкиле булыуына шикләнәм. Аяу белмәгән тарих ағышы Рәсәй уртаһындағы төркиҙәргә, уғырҙарға һ.б. ассимиляция яҙмышын килтерә. Бойондороҡһоҙ дәүләтселектең барлыҡ билдәләре — әләме, тамғаһы(гербы), салауаты (гимны) булған илдең дәүләт теле лә булыуы мотлаҡ. Рәсәйҙә ысын федерация төҙөү тәғлимәте менән ҡоралланған урыҫ интеллигенцияһы һәм башҡа халыҡтар Башҡортостанда башҡорт теленең дәүләт теле итеп иғлан ителеүен тик хупларға тейеш. Сөнки телһеҙ халыҡ тулы хоҡуҡлы дәүләтте хасил итмәй. Хоҡуҡһыҙ дәүләт ысын федерация ғаиләһен тыуҙырмай. Был федерализмдың төп асылына — тиң хоҡуҡлығына яуап бирмәй. Тимәк, федерация ла төҙөп булмай. Ә уның артында — диктатура. Ул дағалы итектәре менән ишегеңде тибеп аса ла үҙеңде түреңдән ҡыуып төшөрә... Был сәйәсәтте аңлау бөтәбеҙгә лә фарыз. Ғөрәф-ғәҙәтен, телен юғалтҡан халыҡ һөҙөмтәлә милләт булып формалаша алмай, социаль ҡатлам ғына булып ҡала.

Рәсәйҙә йәшәгән урыҫ булмаған барлыҡ халыҡтарҙың хәҙерге төп фажиғәһе — яйлап тәбиғи һыҙаттарын юғалтыуы. Тәбиғи һыҙатыңды юғалтыу, әлбиттә, иң алда телдән башлана, сөнки милләт булмышының иң нескә урыны — уның теле! Кешенең ниндәй милләттән булыуын күп осраҡта төҫөнә ҡарап түгел, ә теленә ҡарап билдәләйбеҙ. Хәҙерге осор башҡорттарының, мәҫәлән, монголоид та, европеоид та төҫләләре бик күп. Хәйер, ул борон-борондан шулай булған, сөнки һәр милләт миллионлаған йылдар эсендә төрлө ҡәбилә-ырыуҙарҙан хасил булған. Милләттәрҙең үҫеше, формалашыуы һаман да дауам итә. Быуаттар ағымында бер милләт икенсеһен йотмаҡсы. Был шарттарҙы осорҙоң ижтимағи сәйәсәте тыуҙыра. Әлбиттә, үлемгә ҡаршы көрәшеү файҙаһыҙ, сөнки быуаттар үтеү менән бөгөнгө осорҙоң бөтә дәүләте лә, ижтимағи сәйәсәте лә, сәнәғәте лә һәм милләттәр ҙә икенсе фиғел аласаҡ. Төп хаким бында

— ваҡыт! Йәшәйештең төп мәғәнәһе — оҙаҡ йәшәү өсөн көрәш. Милләт булып оҙаҡ йәшәүҙең ҙур шарттарының береһе — ғәзиз тел! Ул беҙҙең һөйләшеү, аралашыу ҡоралы. Үҙ йортонда, илеңдә сит бауырҙар менән уларса мөңгөрләп, хатта ауаздарын оҡшатырға тырышыу — үҙ-үҙеңде хөрмәт итмәү, булмыш-хоҡуғыңдан яҙҙырыу. Үҙ өйөңдә һин үҙ йырыңды йырларға тейешһең, ә йортоңа килгәндәр һиңә ҡушылырға тейеш. Йырламаһалар, тыңлап ултырһындар. Яйлап өйрәнерҙәр. Телеңде өйрәнһәләр, ихтирам да итерҙәр. Һәр саҡ кеше йырын йырлаһаң — тел-зиһенең ғәрипләнер, унан һуң үлер. Телең үлһә, мәҙәниәтең дә үлер. Күпләп милләт-ара ҡан аралашыу, сит ҡанундарҙы ҡабул итеү ул ғөрөфғәҙәтеңде юғалтыу... Һәм бер нисә быуат үтеү менән уның шыя бысраҡ юлдарында милләтеңдең тик эҙҙәре генә ҡалыр, яҡындағы быуаттар бураны уны бөтөнләйгә күмер. Һәм күп милләттәр тарихта сарматтар, скифтар, бәжәнәктәр-печенегтар кеүек яҙма белешмәләрҙә генә иҫкә алыныр.

Урыҫ халҡының оло шәхестәре, ғалимдары милләттәрҙең урыҫлашыу процесын аңлай, киләсәктә урыҫ халҡы өсөн дә кире һөҙөмтәләр биреү ихтималлығына төшөнә. Шуға ла уларҙың аңлы өлөшө Рәсәй дәүләтенең артабан емерелеүен ҡурсалап, федератив ҡоролошо маҡсатҡа ярашлы тип ҡарай. Минеңсә, ысын федератив ҡоролошто тик ысын федераль конституция нигеҙендә генә төҙөү мөмкин. Рәсәй Конституцияһына үҙгәрештәр индермәйенсә фәҡәт «договорҙар» һәм уларға ҡушымталар менән генә бер ниндәй дәүләтселекте лә үҙаллы федераль дәүләттең федераль берәмеге итеп оҙаҡ ваҡыт тотоу мөмкин түгел. Хөкүмәт сәйәсәте аҙ ғына булһа ла диктатура йүнәлешендә авторитар төҫ алһа, договорҙар, декларациялар көсөн юғалта. Федератив Конституцияның гаранты булып Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы торорға, йәки унда конституция юридик рәүештә теркәлергә тейеш. Бөгөн урыҫ милләте, урыҫ дәүләтселеге өсөн ысын федераль дәүләт төҙөү отошло. Сөнки уның коммунистар партияһы нигеҙендә тотҡан империяһы емерелде, тарих ҡушыуы буйынса милләттәр үҙаллылыҡ алды. Хәрби блок та емерелде, социалистик система тарҡалды.

Тышҡы сәйәсәттә ҙур дәүләттәр, бигерәк тә Америка Рәсәй ихтыяждары менән иҫәпләшмәй, уның көнбайышта берҙән-бер союздашы булып Сербия ҡалды. Был союздашлыҡ та тик диндәшлеккә, славянлыҡҡа ғына ҡоролған. Украина ла Рәсәйҙән ситләшә, сөнки украин халҡына урыҫ теле, урыҫ мәҙәниәте тарафынан йотолоу ҡурҡынысы беҙгә ҡарағанда ундарса тапҡыр күберәк янай. Бөгөнгө етәксеһе тәхеттән төшһә, «Аҡ урыҫ» иле (Белоруссия) ла шундайыраҡ юлға баҫасаҡ. Һәр кемдең үҙ күлдәге тәненә яҡын. Бөйөк державасылыҡ сәйәсәтенең емерелеүе бөтә колониаль системаның емерелеү дәүере менән башланды.

Милләттәрҙең үҙаллылыҡ алыу барышы дауам итә һәм ул киләсәктә икенсе төҫтәр, икенсе алымдар менән үҙгәреш табасаҡ. Рәсәй хөкүмәте өсөн бөгөн ни өсөн федератив ҡоролош отошло? Федератив ҡоролош та ғәмәлдә милләттәргә азатлыҡ килтермәй. Ул һаман да «оло ағай» системаһында була, ғәмәлдә тулыһы менән уның бойоroҡтарынан, ҡыҫҡырыуынан тертләп китә. Рәсәй сәйәсмәндәренә Рәсәйҙе һаман да колониаль империя итеп һаҡлап ҡалыу өсөн бөгөнгө федерализм кәрәк, сөнки башҡа юл әлегә күренмәй. Әгәр халыҡтар үҙаллылыҡ арҡанын әҙ генә бушатһа, быуаттар буйы тапалып бөткән тап-таҡыр авторитар юлға төшөп китеүе бар ҙа бит, тик тарих урынында тормай, колониализм емерелеү кисерә. Коммунистар партия-

һының туғанлыҡ, тигеҙлек, ғәҙеллек һәм башҡа әхлаҡи ҡанундары күп булды. Беҙ уға мөкиббән ышандыҡ, әммә ғәмәлдә партияның был саҡырыуҙары һәм тыштан ысын тигеҙлек өсөн «көрәшеүе» ысынбарлыҡта ваҡ милләттәр өсөн тулы ассимиляция, тулы бөтөрөлөү юлы булды. Мәҫәлән, төньяҡ халыҡтарының иҫ китмәле фажиғәле яҙмышы, милли интеллигенцияһының формалаша алмауы, эскелек, милләттең әхлағының тулыһынса юғалыуы. Телдәренең ҡороуы — милли исемдәре булмауы һөҙөмтәһе лә. Ниңә ненецтың йәки ханттың, шул уҡ яҡуттың үҙ милли исемдәре юҡ бөгөн? Ғүмер буйы Иван булмағандыр ҙа инде? Милләт юғалыуы уның теленең юғалыуынан башлана. Башҡортостан донъяла башҡорт халҡы, башҡорт милләте, башҡорт теле булған өсөн йәшәй. Башҡа милләттәр уның өйөнә килеп һыйынған. Беҙ уларҙың береһен дә ҡыуғаныбыҙ юҡ. Әйҙә, дуҫ йәшәйек! Тик ул дуҫ өйөңә хужа булып, һине һәр төрлө ҡыҫырыҡлау өсөн юл эҙләмәһен! Хәйләкәрлектең, кенә тотоуҙың йөҙө һәр саҡ ҡара, ул йыраҡтан айырылып тора. «Оло ағайҙың» баҫымы тик партия, совет власы осоронда ғына булды, тип фекер йөрөтөүселәр ҙә бихисап. Әйтерһең дә бөйөк державасылыҡ батшалыҡ осоронда булмаған. Милли иҙеүҙең иң көслөһө, иң яуыз сәйәсәте нәҡ шул батшалыҡтар осоронда булған да инде. Халыҡтың байтаҡ өлөшөнөң наҙан булыуы, милли интеллигенцияның аҙ, һөҙөмтәлә көсһөҙ булыуы урыҫ милләтенә хакимлыҡ итеүҙе күпкә еңеләйтергән. Халыҡ, азатлыҡ, тигеҙлек бирелә тип ышанып, коммунистар партияһы артынан китте лә инде. Партияның үҙе лә, программаһы ла насар булманы, тик ул ысын милли федератив дәүләт төҙөй алманы, сөнки партияның башында тик урыҫ шовинистары, юғары державасылыҡ менән ағыуланған урыҫ милләтселәре торҙо. Асылда КПСС милли рус партияһы булды, ә беҙ уның яҙған уставын ғына үтәнек. Башҡортостан автономиялы, йәки үҙаллы идаралыҡлы республика исемен йөрөтһә лә, уның хоҡуҡтары ысынбарлыҡта урыҫ өлкәләренә ҡарағанда аҙ булды. Партия ойошмаһы өлкә комитет тип кенә йөрөтөлдө. Уның менән һәр ваҡыт тигәндәй йә ситтән килтерелгән урыҫ милләтле кеше, башҡорт милли мәнфәғәтенән бик йыраҡ йә иһә уны күрә алмаған, әммә башҡорт булып яҙылған инсандар етәкселек итте. Партия өлкә комитетына йәки хөкүмәт баҫҡысына барып эләккән, күҙгә күренгән, өмөтлө милләт кадрҙарын һәр төрлө сәбәптәр табып һуғып төшөрә торҙолар, был эштә бигерәк тә татар интеллигенцияһы вәкилдәре осҡорлоҡ күрһәтте.

Башҡорт үҙ дәүләтселеген булдырам тип, ҡулына ҡорал алып, меңәрләгән улдарын ҡорбан итеп, үҙенең милли армияһын төҙөп азатлыҡ даулаған. Әгәр остазыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди һәм башҡа шәхестәребеҙ тарафынан ойошторолған ҡоралды милли-азатлыҡ армияһы булмаһа, татар туғандар кеүек трибуналарҙан тороп һүҙ менән генә көрәшһәк, Рәсәй составында татар, башҡорт республикалары булыр инеме икән?.. Милли азатлыҡ көрәше ғәмәлдә республикалар берләшмәһен булдырыуға, тоноҡ булһа ла милли тәғлимәт тыуҙырыу өсөн этәргес көс булған.

Сәйәси партиялар, ниндәй генә булмаһын, йә уңға, йә һулға борола. Федератив дәүләт төҙөү беҙҙең маҡсатҡа ярашлы икән, ул сәйәси партияһыҙ булырға тейеш. Сөнки партиялар, ҡараштарына ҡарап, халыҡты бер-береһенән айыра, милли берҙәмлекте юғалта, һөҙөмтәһе билдәле — еңгән яҡ үҙ шарттарын ҡуя. Дәүләтселектең хөкүмәте лә федератив нигеҙҙә, һәр милләт вәкилдәренән торорға тейеш. Милләт һанына ҡарап түгел, ә милләт барлығына ҡарап. Федератив рес-

публикала тик тиң хоҡуҡлы милли сәйәсәт хөкөм һөрөргә тейеш!

Бөгөнгө Рәсәй Конституцияһы ысын федератив дәүләтселектең маҡсатына ярашлы түгел. Ул милләттәрҙең ысын тигеҙлеген тәьмин итмәй. Федератив дәүләтселек рухындағы бик күп өҫтәмәләр индереү мотлаҡ. Был халыҡтарҙы берләштереүҙә төп көс булыр, һәр төрлө үҙ-ара һуғыштар, дәғүәләр бер осорға тиклем баҫылыр, сәнәғәт үҫер, дәүләт ҡаҙнаһы төп тармаҡтарға ярҙам итер ине. Ҡулланыу һәм аҙыҡ-түлек тауарҙарына хөкүмәт контроле булдырыу, тейешле кимәлдә өҫтәлмәләр биреү, сәнәғәт етештергән тауарҙар менән ауыл хужалығы етештергән тауарҙар араһында хаҡҡа тигеҙлек үлсәме ҡуйыу ҙа республикаларҙың, өлкәләрҙең бер-береһенә ярҙам итеүен, бәйләнешеп көсәйтер.

Бөгөнгө йәмғиәт, кешелек үҙе тыуҙырған ижтимағи осорҙоң һөҙөмтәһе, сәйәсәтелер. Ә сәйәсәт төрлө ҡитғаларҙа төрлө ҡалыплы ижтимағи-сәйәси дәүләттәр тыуҙыра. Дәүләттең ҡалыбына ярашлы уның сәнәғәте һәм мәҙәниәте үҫә. Донъяла барлыҡ нәмә хәрәкәттә. Ә хәрәкәт ул һәр саҡ алға табан була, сөнки тәбиғәттең үҫеше шулай, ул беҙҙең андан, теләктән башҡа хәрәкәттә, ерҙә ул хәрәкәтте туҡтатыр көс юҡ. Шуның өсөн туҡтап ҡалған бер нәмә лә юҡ! Тимер ҙә серей, сәйәсәт тә үҙгәрә, империялар ҙа емерелә, халыҡтарҙың да аралашыуы туҡтамай. Әммә үҫеш юлында үҙ-үҙеңде һаҡлау — иң ҙур тәбиғи шарт.

Барлыҡ көрәштең нигеҙендә үҙ-үҙеңде күрһәтеү, үҙ-үҙеңде раҫлау, өҫтөн сығырға тырышыу ята. Өҫтөнлөк ул — бейектәрәк тороу, үҙ ихтыярыңды көсләп тағыу. Ә өҫтөнлөккә өлгәшеүҙең саралары бик күп. Баҫыу, яулап алыу, телен, мәҙәниәтен бөтөрөү. Бына шундай юлдар менән милләттәргә һәм уларҙың ерҙәренә хужа булған да инде Рәсәй. Ул үҙенең милли сәйәсәтен башҡа халыҡтарҙың сәйәсәтенән өҫтөн ҡуйып, баҫып, үҙенә бойһондорған. Рәсәйҙә урыҫ милләтенең сәйәсәтенә аҙ ғына булһа ла ҡаршы килеү хөкүмәткә ҡаршы килеү тип баһаланған һәм баһалана. Иң ҡыҙғаныслыһы шул: «Милләтсе — ул хөкүмәт дошманы», тип иң алда үҙебеҙҙең милләттең ялағайҙары оран һалған һәм һала, тормош баҫҡысында аҙ ғына булһа ла «бейегерәк» урын алыр өсөн нахаҡ ялыу ҙа яҙған, ялған дәлилдәр күрһәтеп шаһит та булған. «Халыҡ дошманы» тигән мөһөр тағып, милләттең иң аҫыл кешеләрен юҡ итеүҙә «туғандаштар» һәм «оло ағай», әлбиттә, төп ҡылды сирткән. Милләтен һаҡлар өсөн күтәрелгән уның арыҫландары! «Милләтсе» һүҙе бөгөн дә күп кешеләрҙең күңеленә шом һала. Ул кешене иң насар, йәки сәйәси ышанысһыҙ инсан итеп күрһәтеүсе төп дәлил. Империя алдында «милләтсе» тип гәйепләп, президентты ла, үҫеп килеүсе өмөтлө йәш белгесте лә, илен, телен, халҡын тәрән һөйгән һәр инсанды ла юлдан төртөп төшөрөүе еп-еңел, быны өсөн барлыҡ елдәр ҙә ыңғай өрә... Халыҡ был һүҙҙән һаман да тетрәп, һиҫкәнеп, ҡайпылып китә, сөнки уның аңынан был һүҙҙең дошманды аңлатмауы сыҡмай әле. Ә бит милләтеңде яратыу, уның мәнфәғәтен яҡлау, ғөрөф-ғәҙәтен, ауаҙын һаҡлай белеү — ҙур ғорурлыҡ. Үҙ милләтенең ысын вәкиле булған һәр инсан ғорур булырға тейеш, сөнки ул — милләтенең шәхесе. Әммә икенсе милләтте баҫырға, йәки уға һәр төрлө ҡапҡан ҡуйырға берәүҙең дә хоҡуғы юҡ! Һәр милләт бер-береһенә ҡамасауламай, киреһенсә, уны йотолоуҙан ҡурсалап ярҙам итеп йәшәргә бурыслы. Милләтселек — ул ассимиляцияға ҡаршы ирекһеҙҙән ҡойолған ҙур ҡойма! Милләтселек дошмансылыҡ түгел, ә милләтте дауалаусы дарыу! Был һүҙҙең асылын ижтимағи-сәйәси осорға ҡарап төрлөсә аңлатырға була. Милләтсе һүҙе ул асылда урыҫ дәүләтселеген,

державасылығын, милләттәрҙе «в ежовых рукавицах» тотоу ҡоралының атамаһы. Йәнәһе, милләтендә, үҙ булмышыңды яратһаң, илең, халҡың, телең тереклеге, йәғни тәбиғәттә, донъяуи үҫештә хаҡлы урынды милләтең алһын өсөн уның хоҡуҡтары өсөн аҙ ғына булһа ла тауыш күтәрһәң, һин — милләтсе, тимәк, дошман. Ә кемдең дошманы, ниңә дошман? Милләт хоҡуғы тигән төшөнсә Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының бер нигеҙ ташы булып тора. Тимәк, беҙҙә милләт вәкиленең, шәхесенең үҙ халҡын яратырға хоҡуғы барҙыр. Милләт хоҡуғы тигән төшөнсәне икенсе күҙлектән дә ҡарап була. Милләт хоҡуғы тигән ҡанун-закон киләсәк федератив дәүләтселектең, уның яңы Конституцияһының төп өлөшө булып, ҡалған статьялар был ҡанундың балалары булырға тейеш!

Һүҙ ғилеменең бөйөк белгесе С.И. Ожеговтың аңлатмалы һүҙлегендә «милләтсе» һүҙенә ике баҫҡыстан тороп аңлатма бирелә: «Национализм — реакционая буржуазная идеология и политика, направленная на разжигание национальной вражды под лозунгом защиты своих интересов и национальной исключительности и практически служащая интересам эксплуататорских классов». Шунда уҡ икенсе бүлек менән икенсе төрлө аңлатма бирә: «национализм — в порабощенных и зависимых странах: народное движение, направленное на борьбу за свою национальную независимость. Нация — исторически сложившаяся устойчивая сущность людей, возникшая на базе общности языка, территории, экономической жизни и психического склада, проявляющегося в общности культуры». С.И. Ожеговтың «национализм» һүҙенә тәүге аңлатмаһы тулыһы менән һүҙлектең сыҡҡан ваҡытына, тоталитаризм дәүеренә ауаздаш. Ундай аңлатма бирмәһә, бәлки, һүҙлек сыҡмаған да булыр ине... Тимәк, үҙҙаллылығы, бойондороҡһоҙлоғо өсөн алып барылған хәрәкәт, айырым шәхестәрҙең был йүнәлештәге эше изге. Сөнки һәр йән эйәһенең, һәр милләттең был яҡты донъяла йәшәргә хоҡуғы бар, ә милләтең өсөн көрәш — ул йәшәү өсөн көрәш! Ниндәй реакцион, етмәһә буржуаз идеология булһын ти ул? Бәлки, сит илдәр өсөн был төшөнсә бер аҙ ҡулланылмалылыр, тик башҡорт халҡы өсөн түгел! Башҡорт халҡы бер халыҡтың да иленә яу менән бармаған, бөтә тарихы буйынса ул тик үҙ ерен, үҙ халҡын ғына яҡлаған, бер халыҡтың да үҙаллылығы өсөн барған хәрәкәтен баҫмаған... Милләттәр араһындағы мөнәсәбәткә лә ҡыҫылмаған, уның үҙ ҡайғыһы, үҙ мәсьәләләре баштан ашҡан. Эҙләмәгеҙ башҡорт араһында дошманды, тик үҙегеҙ ҙә уның азатлығын сикләүгә асыҡ та, аҫтыртын да эш итмәгеҙ! Хужаның өйөндә йәшәгәс, килешеп йәшәү зарур! Уның телен хөкүмәт теле итеп нарыҡлауға ҡаршы сығыу, милли кадрҙарын һәр төрлө ысулдар ҡулланып баҫыу милли хәрәкәтте тыуҙыра, милләт үҙен яҡларға тейеш була.

Милли үҙенсәлектәрен яҡлап, һаҡлап, үҫтереп кенә йәшәй милләт.